Азат Абдуллин (1930)

Драматург

Илебеҙ сәхнәләрендә
генә түгел,
башҡа бик күп
сит ил
театрҙарында ла
ҡуйылған
«Ун өсөнсө председатель»
спектакле
менән
Азат Абдуллин
башҡорт драматургияһын
бөтә донъя
күләменә
алып сыҡты.

Гайса Хөсәйенов

Әҙәбиәткә А. Абдуллин драматургия аша килде. Оҙаҡ йылдар ул рус шағиры Сергей Чекмаревтың Башҡортостандағы эшмәкәрлек йылдарын өйрәнгәйне. 1963 йылда Башҡорт академия драма театрында ҡуйылған «Онотма мине, ҡояш!» пьесаһы ла уға арналғайны. Әҫәрҙең яҙмышы бәхетле булды, руссаға ла тәржемә ителеп, илдең төрлө сәхнәләрендә ҡуйылды, юғары баһа алды. А. Абдуллиндың ошонан һуң донъя күргән драма, повесть, очерктары ла һәр саҡ ифрат көнүҙәк яңғыраны, бәгзеләре хатта сит ил сәхнәләренә лә сыҡты.

Азат Хаммат улы Абдуллин 1930 йылдың 26 июнендә Башҡортостандың Ейәнсура районы Үрген ауылында тыуған. Үҙ ауылында урта мәктәпте тамамлағандан һуң, ул ошонда уҡ тәрбиә-уҡытыу эшендә ҡала. Һуңыраҡ, 1949 — 1953 йылдарҙа, Башҡорт дәүләт педагогия институтының тарих факультетын тамамлай. Унан Мәскәүҙәге А. М. Горький исемендәге Донъя әҙәбиәте институтына аспирантураға инә. Уҡыуын тамамлағас, ҡайтып, бер йыл Башҡорт дәүләт университетында эшләй ҙә кире Мәскәүгә китә, әҙәби ижад менән шөғөлләнә.

А. Абдуллин драматургияһы. Азат Абдуллиндың драматургияға һәләте иң тәүҙә уның **«Онотма мине, ҡояш!»** (1963) исемле романтик драмаһында күренде.

30-сы йылдарҙа Мәскәүҙән үҙ теләге менән Көньяҡ Башҡортостанға зоотехник булып килеп, драматик яҙмышҡа осраған, аҙаҡ йәш кенә көйө ошонда һәләк булып ҡалған билдәле рус шағиры Сергей Чекмарев тормошона һәм көрәшенә арналған был әҫәр. Башҡортостан һәм бөтә ил, шул иҫәптән ҡаҙаҡ сәхнәләрендә лә ҡуйылып, оҙаҡ йылдар тамашасы иғтибарынан төшмәй бара ул. Драманың уңышы, бәлки, С. Чекмаревтың бер шиғырында әйтелгәнсә:

Көрәш миңә ярҙам итә шағир булырға,
Шағир ярҙам итә көрәшсе булырға, —

тигән һүҙҙәренә лә барып тоташалыр. Романтик хистәр менән йәшәгән яҡты күңелле герой, шул уҡ ваҡытта көрәшсе лә итеп һүрәтләнә унда.

Идея-тематик яҡтан А. Абдуллин драмалары бер-береһенә тығыҙ бәйле. Аныңыраҡ әйткәндә «Ун өсөнсө председатель», «Һуңғы уҙаман» әҫәрҙәре геройҙарын «Онотма мине, ҡояш!»тағы һымаҡ уҡ, драматик яҙмыш, шәхес көрәше сифаттары берләштерә.

«Йөрәктә сәнселгән аңлауҙар» исемле радиопьеса проза ҡанундары менән яҙылған, шул уҡ ваҡытта уға лирик сигенеүҙәр, оҡшашлыҡтар-уртаҡлыҡтар менән хикәйәләү ҙә ят түгел. Автор поезда сит илдән, Германиянан ҡайтып килә, саҡырыу буйынса барған, шахтёрҙар, фермерҙар, вазифалы кешеләр менән осрашҡан. Ошолар тәьҫирендә ул әле ябай булмаған үҙ яҙмышын да һүтеп тағатып килә... Әсәһен нахаҡҡа ғәйепләп, хөкөм итеүҙәре, мөлкәттәрен тартып алыуҙары... Һуңынан да башынан үткән драматик ваҡиғалар ауыр кисерештәр булып төйнәлә килә герой күңелендә... Ошо ваҡиғалар һәм сит илдәге тәьҫораттар бер-береһенә үрелә, әхлаҡи һығымталар яһала. Шулар нигеҙендә герой «Һайлаған яҙмышыңды, ҡағылһаң, һуғылһаң да, нисек итеп яҡлай һәм һаҡлай алыу» хаҡында уйлана...

Ошо йүнәлешле уйланыуҙар А. Абдуллиндың **«Ун өсөнсө председатель»** драмаһының да нигеҙендә ята. 1979 йылда донъя күргән был әҫәр заманында шаҡ ҡатырлыҡ яңылыҡҡа ла әүерелгәйне. Уны Мәскәү театрҙары ҡуйҙы, хатта сит ил сәхнәләренә лә сыҡты.

«Ун өсөнсө председатель» драмаһы «Ҡыҙыл нур» колхозы председателе Мурат Гәрәй улы Сәғәҙиевте хөкөм иткән суд залынан башлана һәм ошонда уҡ Сәғәҙиевтең һуңғы һүҙҙән баш тартыуы менән тамамлана ла. Ләкин әҫәрҙәге көсөргәнешле драматизм ваҡиғаларҙың суд залында барыуында ғына түгел, ә композицияның үҙенсәлекле ҡоролоуында ла. Тамашасыға башта һүҙҙең ни турала барыуы, председателдең нимә өсөн хөкөмгә тарттырылыуы асыҡ түгел дә кеүек. Судья Рахманов: «...Сәғәҙиев Мурат Гәрәй улы РСФСР уголовный кодексының туҡһан икенсе статьяһының өсөнсө булеге һәм йөҙ етмешенсе статьяһының икенсе бүлеге буйынса ғәйепләнә», — тип иғлан итә итеүен, тик был статьяларҙа нимә әйтелеүен хоҡуҡи белеме булмаған тамашасы ҡайҙан белһен? Етмәһә, Мурат Сәғәҙиевтең үҙ-үҙен тотошо ла сәйер, адвокаттан баш тарта (йәнәһе, «ғәйепле икәнмен, адвокат миңә ярҙам итмәйәсәк»), «Үҙегеҙҙе ғәйепле итеп таныйһығыҙмы?» — тигән һорауға ла «шаһиттарҙан һорау алмай тороп, әлегә яуап бирә алмайым», — ти. Ул арала Назар Вьюгин тигән әҙәм протез аяғында шағыр-шоғор килеп инә лә «ҡылдың эште ҡылғансы — ял ит хәҙер туйғансы» нымаҡ килделе-кителе һүҙҙәр әйтеп ташлай.

Ошондай серле башланыш, әлбиттә, тамашасыны һағайта, көсөргәнешлелекте арттыра, артабан ни булырына ымһындырып көтөргә мәжбүр итә.

Шаһиттарҙан һорау ала башлағас ҡына хәл бер аҙ асыҡлана. Күп улар, шаһиттар, барыһы ла ауыл хужалығының төрлө тармаҡтарында эшләүселәр. Шуға ла председатель Сәғәҙиевте хөкөм итеүгә лә төрлөсә баһа бирәләр. Иң тәүҙә, шаһит итеп колхоздың төҙөлөш бүлеге етәксеһе Ильяс Ҡудашев саҡырыла, унан колхоздың агрономы Сәлмәнова Ҡәҙриә, артабан алтмыш биш йәшлек сал сәсле ферма мөдире Һаубан апай, егерме туғыҙ йыл тракторҙан төшмәй эшләгән Харисова Һәҙиә, инженер-механик Закировтар яуап тота... Райком секретары Дауыт Байымов та, шаһит булараҡ, Сәғәҙиев мәсьәләһенә үҙенсә баһа бирә. Был шаһиттар бер үк ваҡытта, әлбиттә, әҫәр персонаждары ла, Сәғәҙиевте уратып алған мөхитте, уның төрлө тармаҡтарын дөйөмләштереп торалар. Характер булараҡ үҙҙәре лә асыла баралар, Мурат Сәғәҙиев «енәйәтенә» мөнәсәбәттәрендә колхоз, ауыл яҙмышы мәсьәләһенә лә күп яҡлы һәм дөрөҫ баһа бирәләр.

Шаһиттарҙың яуаптарынан, йәнә аҙаҡ хөкөм залында сығып һөйләүселәрҙән шул асыҡлана: Мурат Сәғәҙиев үҙе ошо ауылда тыуған. Бындағы «Ҡыҙыл нур» колхозын да башлап уның атаһы Гәрәй Сәғәҙиев ойоштороған. Тик һуғышҡа китеп, Мәскәү янындағы алыштарҙа һәләк булып ҡалған. Ошонан һуң колхоз председателгә һис тә мандымаған; бер-бер артлы алышынып торһалар ҙа, колхоз алға китмәгән, емерелә генә барған. Йәштәр ауылдан ҡалаға ҡасыу яғын ғына ҡарап торған. Ана шулай сағыштырмаса ҡыҫҡа ғына ваҡытта ун ике председатель алышынған «Ҡыҙыл нур»ҙа.

Шул саҡта ауылдаштары элекке председателдәре Гәрәйҙең һуғыштан ҡайтып обкомда эшләп йөрөгән улы Мурат Сәғәҙиевте иҫкә төшөрә. Ауылға ҡайтып, атаһы ойоштороған колхозды өҙөкләктән сығарыуын үтенәләр. Баш тарта алмай Мурат Сәғәҙиев был үтенестән, колхозға ун өсөнсө председатель булып ҡайта.

Төрлөсә ҡабул итә быны кешеләр. «Йүләр һин, йүләр, — тиҙәр Сәғәҙиевте яҡын күргәндәр ҙә. — Шундай ҙур урынды ташлап китәләрме? Бит ун ике председатель бер эш сығара алманы».

Ысынлап та, еңел булмай Морат Сәғәҙиевкә башта. Колхоздың бурыстары күп, малдар күтәртә — аҙыҡ юҡ, кешеләр эшкә йөрөмәй, сөнки колхоз эш хаҡы түләрлек түгел; етмәһә, Морат Сәғәҙиевтең фронтта уҡ танышып, яратышып өйләнешкән ҡатыны ла, бында килгәс, яралы үпкәһенән мандымай вафат булып ҡуя...

Бына ошонан һуң күп уйлана Морат Сәғәҙиев көрсөктән сығыу юлдары хаҡында.

Ниҙәр эшләйҙәр һуң улар, колхоз нисек аяҡҡа баҫа? Ни сәбәпле уларҙы бының өсөн хөкөм итәләр? Бына ул эштәр: Назар Вьюгин етәкселегендә колхоз баҡсасылыҡ эшенә тотона, ҡыяр үҫтереп консервалай, килем ала; инженер-механик Закиров промыслалар цехы аса, арҡан, канаттар ишкәндәр, ҡышын тире иләткәндәр, аҡса эшләткәндәр... Умартасылыҡты үҫтергәндәр, бал һатҡандар... Шәшке үрсеткәндәр, шәшке тирәһе эшкәрткәндәр...

Күп бындай табышлы эштәр, уларҙың барыһын Морат Сәғәҙиев ойоштора, шуға әле хөкөм залында яуап та бирә.

Тапҡан аҡсалары ла уларҙың әрәмшәрәм ителмәй, шул уҡ колхозсылар файҙаһына китә. Мәҫәлән, шәшке тирәһен колхозсыларға бүрек, яға өсөн бирәләр, колхоз идараһы һәйбәт эшләгән бишәр, етешәр балалы ҡатындарҙы, үҙ иҫәбенә путевка һатып алып, Ҡара диңгеҙ буйына ялға ебәрә. Етмәһә, улар ялда булған көндәр — эш көндәре итеп иҫәпләнә. Бына шуның өсөн дә ғәйепләйҙәр икән Сәғәҙиевте, йәнәһе, 40-лап кеше, эшләмәйенсә ялған документ тултырып, аҡса алған... Йәки бына колхоздың төҙөлөш бүлеге етәксәһе Ҡудашев Ильястың шаһитлыҡ яуаптарын беҙ колхоз аҡсаларына торлаҡ йорттар, балалар баҡсаһы, теплица өсөн сантехник ҡорамалдар һатып алыу, шуның менән «колхоз аҡсаһын туҙҙырыуҙа» ғәйепләнеүҙәрен беләбеҙ.

Был ғәйепләүҙәр — система ҡаршылыҡтары, үҙ табышына үҙе хужа була алмаған колхоз хужалығы деградацияһы. Шуға ла төп ғәйепләүселәрҙең береһе булып райком секретары Дауыт Байымовтың сығыш яһауы ла ғәжәп түгел. «Баштараҡ эше бара, аҡылы айыҡ, күп һөйләшмәй, һандарғына килтереп: «Был файҙалы», «Ә был табышһыҙ», — тип өҫтәп ҡуйыр ине», «Сәғәҙиев халыҡты үҙенә ҡарата белә», — райком секретары Сәғәҙиевте шулай маҡтаған һымаҡ булһа ла, — әммә тиҙҙән был ыңғай сифат унда киреге үҙгәрә башланы, — тип бороп ебәрә. — Мин булдыҡлы икән, миңә бөтәһе лә ярай, тип уйлау уның ғәҙәтенә инде». «Сәғәҙиевте беҙ күп киҫәттек, шелтә-язалар ҙа бирҙек. Ул үҙенекен дауам итте». Нимәлә ғәйепләй район башлығы колхоз председателен? «Ярҙамсы промыслалар... Сәғәҙиевтә төп производствоны ҡыҫырыҡланы, башҡа хужалыҡтар араһында социаль тигеҙһеҙлек тыуҙырҙы»; «Күрше колхоздарҙа халыҡ насар эшләмәй, ә эш хаҡын шаҡтай кәм ала ине»...

Шуныһы ҡыҙыҡ, председатель Сәғәҙиев үҙен ғәйепләгәндә лә, яҡлап һөйләгәндә лә — суд барышының байтаҡ өлөшөндә өндәшмәй, хатта һүҙ бирһәләр ҙә баш тартып тик ултыра. Әҫәрҙең төп геройының сюжет үҫтерелешендә шулай һүҙһеҙ-хәрәкәтһеҙ ҡалыуы тәү ҡарашҡа ғәжәп хәл. Ләкин был драматургтың уйлап еткермәүе түгел, киреһенсә, уңышлы табылған үҙенсәлекле, көслө ижади алым. Мәскәү сәхнәһендә Сәғәҙиев ролен уйнаған билдәле актер В. Лановой был турала, мәҫәлән, бына нимә ти: «Миңә элегерәк, сәхнәлә өндәшмәй тороуҙан да ауырыраҡ хәл юҡ, тип әйтә торғайнылар, һәм мин бындай хәл менән беренсе тапҡыр «Ун өсөнсө

председатель»дә осраштым. Кешеләр председатель тураһында һөйләй, ә ул — ләм-мим. Бер сәғәттән ашыу өндәшмәй. Был өнһөҙлөк нимәне аңлата һуң? Был арыумы, вайымһыҙлыҡмы, ҡурҡыумы?

Сәғәҙиевтең өндәшмәй ултырыуы — колхозсылар уның өмөтөн аҡлағандары өсөн, эшләгән йылдарҙың әрәмгә үтмәгәне өсөн күңелендә ғәйәт ҙур рәхмәт тойғоһон, хисен туплау ул. Был уның бәхетле минуттары, тап ошо мәлдә ул кешеләрҙән уларҙың күңел түренән сыҡҡан рәхмәт һүҙҙәрен ҡабул итә. Ул үҙенең колхозсыларының бөтә йәһәттән дә һоҡланғыс асылыуҙарын күреп тора. Ниндәй иманлы, ниндәй ышаныслы кешеләр! Председателдең күҙ алдына мәғжизә барлыҡҡа килә! Бына ошоларҙың бөтәһенән һуң ул үҙенең йомғаҡлау монологын әйтеп бирә».

Шуны ла өҫтәп әйтергә кәрәк, колхозсыларҙың хөкөм залындағы сығыштары Сәғәҙиевте яҡлау ғына түгел, улар ошоноң менән үҙҙәренең тормош ҡатмарлылыҡтарын да, колхоз хәлен дә, күңел нескәлектәрен дә — ауыл хужалығындағы осор ҡаршылыҡтарын сағылдырыуға дәғүә иткән әҫәрҙең төп мәсьәләләрен тулыһынса асып һалалар. «Егерме туғыҙ йыл инде мин тракторсы, — ти, мәҫәлән, асырғанып ҡырҡ биш йәшлек колхозсы ҡатын Харисова. — Ун ете йәшемдә тракторға ултырғайным, шунан бирле төшмәйем... Егерме ете йыл мин ял итмәнем. Ишәктәй эшләүемде белдем. Биш баланы бит ашатырға, үҫтерергә кәрәк; ирем һуғыш инвалиды ине.Тиҙҙән уны ла юғалттым. Ял көнөнең ни икәнен мин белмәй инем... Әле бында, завод директоры, эш хаҡтары түләп, эшселәрҙе ялға ебәрә аламы, тинеләр. Ә ул эшселәрҙе егерме ете йыл отпускыһыҙ эшләтә аламы?! Күптән түгел бухгалтер миңә: «Әгәр һиңә отпускылар, ял көндәре өсөн тейеш аҡсаларҙы йыйһаҡ, һин биш йыл, ҡыл да ҡыбырлатмай, эш хаҡын ала алаһың», — ти... Бына бит нисек эштәр. Ә һеҙ колхоз миңә ялға биргән йөҙ егерме һумды ғына күргәнһегеҙ...»

Ошондай сығыштар асып һала ауыл кешеләре тормошондағы ысын хәҡиҡәтте. Баштараҡ судья Рахманов шаһиттарҙы тыңлап бөтөп, прокурор ғәйепләүҙәренә генә таянып, Сәғәҙиевтән яуап алырға йыйынғас, күңелдә «шуның менән тамамлана микән ни?» тигән ризаһыҙлыҡ та уянып ҡуя. Ләкин бына агроном Ҡәҙриә яңынан тороп баҫа, унан Һаубан апай, Вьюгин, Ҡудашев. Асы хәҡикәт шулай асыла бара, асыла бара...

«Ун өсөнсө председатель» драмаһы ҡуйған мәсьәләләр, әлбиттә, күп яҡлы. Уларҙың мөһимерәктәренән шуны күрһәтәйек: ауылдар өсөн һәр ваҡытта ла йәшәү мәсьәләһе булып торған йыл әйләнәһенә дауам иткән хеҙмәт менән тәьмин итеү, хеҙмәт ресурстарын дөрөҫ файҙаланыу, ер кешеләрен мул тормошҡа сығарыу. Шуның менән бергә, ошондай мөһим хужалыҡ мәсьәләләрен күтәреп, драматург уларҙы әхлаҡ яғынан да ҡарауға ирешкән, художество саралары аша һүрәтләү был ваҡиғаларҙы йәнә тулҡынландырғыс та иткән.

Сәғәҙиев колхозсылар күңелен хеҙмәт, матди байлыҡ менән генә яулamаған. Йәш сағында матрос, хәҙер эскегә һабышҡан Назар Вьюгинға тиклем, мәҫәлән, хөкөм залында Сәғәҙиевтең консервалар цехын асырға һәм ошо эшкә етәкселек итергә тәҡдим яһауын иҫкә алып: «Нимәгә зарығам мин, дуҫҡайым, тип ҡысҡырып ебәрҙем мин шул саҡ, — ти. — Күтәренке күңел менән йәшәргә зарығам бит! Шундай консервалар яһаясаҡмын — бөтә райондың һушы китәсәк!»

«Ә беҙ сәскәләрҙе аҡса өсөн генә үҫтермәнек, — ти Сәғәҙиев үҙе лә. — Шулар янында беҙ ҡайғыбыҙҙы тара-

та, тыныслана, онотолған йырҙарға йәшәү көсө бирә инек һәм, һәр үтеп киткән көндө һыҙмайынса, уның хаҡын белеп оҙата инек. Ниндәй ябай был, ниндәй мөһим... Сәскә һәм йырҙарҙы үҙенең байлығы итеп иҫәпләүсе халыҡ — бай халыҡ! Үҙ йырҙарын онотҡан, йырлауҙан туҡтаған халыҡ үҙ ҡөҙрәтен юғалтыуға дусар».

Сәғәҙиев тураһында автор башта уҡ: «Текә маңлайын, ҡашы өҫтөндәге яра эҙен иҫәпкә алмағанда, ул бер ере менән дә иғтибарҙы үҙенә тартмай тиерлек», — тип таныштыра. Ул ғәҙәти, Сәғәҙиев урынында башҡа председателдәр ҙә ултырыуы ихтимал. Йәғни типик күренеш был, шул осорҙоң йәшәйеш үҙенсәлектәре.

Әлбиттә, драма ахырында Сәғәҙиев хөкөм ителә, төрмәгә ебәрелә. Ул осорҙағы колхоз тарихы өсөн был тәбиғи хәл. Ләкин әҫәрҙең социаль һәм әхлаҡи әһәмиәте икенсе юҫыҡта ята. Сәғәҙиев «бүтәндәр өсөн көрәшкәндә көслө ине, — ти, мәҫәлән, колхоздың инженер-механигы Закиров. — Ә үҙен яҡлау көнө еткәс, уның көсө булмай сыҡты һәм беҙ шул минутта ауыҙ асып ҡалдыҡ». Һауынсы Юнысова Хәлиҙәнең кисерештәре лә ошоға ауаздаш: Сәғәҙиевте партиянан сығарғанда, ул үҙ намыҫына ҡаршы барып, ҡул күтәрә һәм ошо бер тауыш председателдең яҙмышын хәл итә... Хәҙер Хәлиҙә апай үкенә, ғазаплана, йоҡлай алмай, «оло ҡыҙым битемә төкөрҙө», — тип илай...

«Ун өсөнсө председатель» пьесаһы замана өсөн ифрат та көнүҙәк социаль, иҡтисади мәсьәләләрҙе гражданлыҡ позицияһынан тороп ҡыйыу күтәреүе менән дә айырылып тора. Әҫәр буйынса фекер алышыуҙа, мәҫәлән, ул саҡтағы СССР дәүләт план комитеты хеҙмәткәре К. Комиссаров бына нимә ти: «Вахтангов исемендәге театрҙа был спектаклде ҡарағас, пьесала күтәрелгән күп кенә мәсьәләләр буйынса беҙҙең эш тәжрибәһендә тәүге тапҡыр махсус кәңәшмә саҡырылды». Былар барыһы — ауыл хужалығында ла иҫке ҡоролоштоң, иҫке мөнәсәбәттәрҙең емерелә барыуын, яңы осорҙоң башланыуын раҫлай ине. Шуға ла драма Сәғәҙиевтең хөкөм ителеүе менән тамамланыуға ҡарамаҫтан, колхозсыларҙа председателдәренә ҡарата изге тойғо һүнмәй, эшләгән эштәренең хаҡлығына инаныу, киләсәккә өмөт ҡала. Быны шул уҡ инженер-механик Закировтың кинәйәле һүҙҙәре лә раҫлай: «Бер әсә үҙенең улы тураһында, йөрәген һыҡтылар баламдың, был хәйерлегә булыр, сөнки хәҙер ул ысынлап көрәшә башлаясаҡ, тигән».

Шулай булып сыға ла. А. Абдуллин «Ун өсөнсө председатель» темаһын дауам итеп, **«Һуңғы уҙаман»** исеме аҫтында уның икенсе әҫәрен дә яҙҙы.

Ике бүлектән торған «Һуңғы уҙаман» драмаһында «Ун өсөнсө председатель»дәге шул уҡ персонаждар тиерлек. Тик дүрт йыл үтеп киткән. Теге саҡта Сәғәҙиевте ғәйепләүселәр яғында торған йәнлек фермаһы мөдире Яҡупов хәҙер колхоз председателе булып алған. Ә Сәғәҙиевте хөкөм залында ла, аҙаҡ уны төрмәгә ултыртҡас, адвокаттар аша ла яҡлап йөрөгән, хатта «Правда» гәзитенә лә хаҡлыҡ юллап хат яҙып ебәрергә йыйынған элекке агроном Ҡәҙриә менән инженер-механик Закиров сәйер шарттарҙа һәләк булып ҡуйған... Хаҡлыҡ юллап, халыҡ күпме генә түрәләргә йөрөмәһен, Сәғәҙиевте аҡламағандар.

Шаршау асылғанда «Ҡулына төйөнсөк тотҡан Сәғәҙиев күренә. Төҫбашына ҡарағанда ул оҙон юл үткәнгә оҡшай». Йәғни әле уның дүрт йыл ултырып, төрмәнән ҡайтып килеше. Ныҡ үҙгәргән Морат Сәғәҙиев. «Утта көйгәндәй йөҙө» элекке таныштарын тетрәтерлек, ҡайһы берҙәренә ул былай ҙа «әллә ниндәй булып күренә».

Колхозда ла хәҙер күп нәмә үҙгәргән. Председатель Сәғәҙиев етәкселегендә төҙөлгән цехтар, фермалар, баҡсалар юҡҡа сыҡҡан, байлыҡ та һыуҙай ҡайҙалыр ағып киткән. Талпандарға ҡаршы көрәшәбеҙ тип, ағыу һибеп, бал ҡорттарын да үлтереп бөткәндәр, Вьюгин етәкләгән консерва цехы ла ябылған. Ә цех етәксеһе Назар Вьюгин янғын һүндереүсе вазифаһына ҡуйылған. Аттар, шул иҫәптән спорт аттары ла, һатылған... Ә уларҙы «һатыуҙан килгән аҡса — банкеттарға, ревизорҙарҙы һыйлауға киткән. Уҙған йылғы былай ҙа аҙ балдың дүрт центнерын председатель булып алған Яҡупов бүләктәр итеп таратып бөтөргән. Быйыл ғына ла ҡырҡ алты шәшке тирәһе түрәләргә ебәрелгән».

Бына ошондай төшөнкө күренештәр менән осраша тамашасы «Һуңғы уҙаман» драмаһында. Быларға өҫтәп, Вьюгиндың яңынан эскелеккә һабышыуын, колхозсыларҙың күбеһенең өмөтһөҙлөккә бирелеүен дә әйтергә кәрәк.

Ләкин халыҡ барыбер яҡты хыялдарынан, ғәҙеллек табыуҙан ваз кисмәгән. Йыйылыш яһап, колхозсылар Яҡуповты ҡыуып, Сәғәҙиевте яңынан рәйеслектә алырға күндерәләр. Драма аҙағында Сәғәҙиевтең дә битарафлыҡтан ҡотола барып, колхоздың элекке ҡеүәтен ҡайтарыу юлына яңынан аяҡ баҫыуы тойомлана.

Сюжет драматизмы һәм конфликт көсөргәнешлелеге яғынан «Һуңғы уҙаман» драмаһы «Ун өсөнсө председатель»гә ҡарағанда ҡайтышыраҡ булһа ла, үҙгәрә барған осор шарттарын, Сәғәҙиев кеүек эшлеклеләр хеҙмәтен дөрөҫ баһаларҙай заман яҡынлашыуын күҙаллап һүрәтләүе менән ул, һис шикһеҙ, әһәмиәтле әҫәр.

А. Абдуллиндың прозаһы. 1975 йылда А. Абдуллиндың малсылар образын тыуҙырыуға арналған **«Аҡтан аҡ һөт»** тигән повесы Мәскәүҙә баҫылып сыға. Яҙыусының үҙ һүҙҙәре менән әйтһәк, «беҙҙең тау-яландарҙа, малсыларҙың талғын ғына әңгәмәһен тыңлағанда, улар менән йәйләүҙә йөрөгәндә, артылыштарҙы артылғанда» яҙылған был әҫәр.

Уның үҙәгендә — малсы Килдебай, көтөүсе генә түгел, шағир-фәйләсүф тә. Үҙ һөнәренең бәҫен белеп йәшәй ул, донъяны, үҙен уратып алған мөхитте, ер улы булараҡ, яҡты тойғолар менән ҡабул итә.

А. Абдуллиндың **«Артылыштар»** исемле документаль повесы «Аҡтан аҡ һөт»кә ифрат яҡын, унда ла атаҡлы малсы, Ленин ордены кавалеры, Социалистик Хеҙмәт Геройы Килдебәк образы («Аҡтан аҡ һөт»тәге Килдебайҙың прототибы реаль Килдебай Сөләймәнов тормошо) һүрәтләнә. Күп балалы ғаиләлә биш туғаны араһында тәрбиәләнә ул. Әсәләре иртә донъя ҡуя. Ләкин аталары алып ҡайтҡан икенсе ҡатын да изге күңелле, эшһөйәр кеше булып сыға. Тик уның иңдәренә биш баланы ҡалдырып, фронт яраларынан атаһы ла вафат булып ҡуя.

Ун биш йәшендә атанан да ҡалған Килдебәккә тормошта үҙ урынын табыу өсөн хәләл көсө менән ныҡ тырышырға тура килә. Яҙыусы уны социаль планда — хеҙмәттә, малсылыҡ эшендә генә түгел, тормоштоң ҡаршылыҡтар тулылығында — әсенеүҙәре, шатлыҡтары, еңеүҙәре һәм юғалтыуҙары менән ҡушар һүрәтләй, шәхес формалашыуын кәүҙәләндерә. Килдебәк илдең сиҙәм райондарында һауым буйынса рекорд ҡуя, шуның өсөн Ленин орденына лайыҡ була. Ябай ауыл егете Мәскәүҙә съездарҙа ҡатнаша, сығыштар яһай, Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән юғары дәрәжәгә лайыҡ була.

Ләкин былары әле хеҙмәт баҫҡыстары ғына. Килдебәк ошо артылыштарҙа үҙе лә үҫә, халыҡ аҡылын, тарих тәжрибәһен үҙенә һеңдергән шәхескә әүерелә. Мал көтөүе менән тауҙар, түбәләрҙе артылғанда «түбә-

ләстәргә уралған тармаҡлы һуҡмаҡтарҙа ул мал үрсетеп ғүмер сиккән ата-бабаларының эҙҙәрен дә төҫмөрләгәндәй була», «Артылыштар уға гел уҙған йылдарҙы хәтерләтә... Шул артылыш-йылдарға күҙ йүгерткән һайын, ул ирекһеҙҙән боронғо башҡорт йыры «Зөлхизә»не иҫенә төшөрә, үҙе лә һиҙмәҫтән йырлап ебәрә. Моң менән бергә сал быуаттар килә уның күҙ алдына...

...Ялан ғына ерҙән болан килә,
Зөлхизә,
Уйһыу ғына ерҙән үтәм тип,
Зөлхизә...

Йырлаған ыңғайҙа ул һәр һүҙҙең мәғәнәһенә төшөнөргә, йырҙың йөрәгенә үтеп инергә ынтыла, һәм шул саҡта, күкрәге менән елде ярып, болан түгел, ә үҙе килә һымаҡ тойола ине уға».

Ләкин Килдебәктең уйҙары бында ғына туҡтап ҡалмай. Йырҙағы һәр һүҙҙе аңлаһа ла, бөтәһен бергә наҡлаған серле мәғәнә уның өсөн асылмай ҡалғандай тойола:

Төн уртаһы еткәс, бер ҡыҙ илай,
Зөлхизә,
Йәш ғүмерем заяға, ай, үтә тип,
Зөлхизә...

«Нимә әйтеп еткерелмәй?... Бында һүҙ болан йәки Зөлхизә тураһында ғына барамы?.. Юҡ, эш икенселә, оло бер мәғәнә булырға оҡшай бында, — тип оҙаҡ уйланды ул һәм уны эҙләп табырға тырышты. — Мәғәнә минең үҙемдә, минең күңелемдә булһа кәрәк...» Бына шулай көтөүҙәре менән артылыштарҙан артылып, икһеҙ-сикһеҙ далаларҙы ҡыҙырып йөрөгәндә ябай хеҙмәт эйәһе Килдебәк рухи йәһәттән дә юғары бейеклектәргә артыла, күңелендәге бушлыҡ арауыҡтарын да фәһемле уйланыуҙар, гүзәл заманлыҡлы асыштар менән байыта. Әхлаҡи юғарылыҡ, рухи байлыҡ билдәләй уның артабанғы яҙмышын да. Инде ирешәһенә ирешеп, күкрәккә ордендар ҡаҙап, хеҙмәт геройы булып алғас, уға хәҙер «престижныйыраҡ эш» — йә экономислыҡҡа, йә агрономлыҡҡа уҡырға тәҡдим итәләр. Ләкин ул үҙ һөнәренә тоғро ҡала: «Минең атайым ғүмер буйы малсы булды... Ниндәй ҙә малсы әле!»

Ата-баба һөнәренә, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәренә, йәшәйеш ҡанундарына ихтирамлы ыңғай геройҙар. «Йыш ҡына атайым мине үҙе менән һунарға алып барыр ине, — ти, мәҫәлән, Йәғҙә «Онотма мине, ҡояш!» повесында. — Кистәрен, йырлай-йырлай ҙа, ярһыуын баҫа алмай, күккә атып ебәрер ине. Унан миңә, сабыр бул, ҡыҙым, сабыр бул, бөтә бәлә йөрәктең сабырһыҙлығынан, ти торғайны...»

Әҫәр геройҙары ябай ғына эштәрен тәбиғи матурлығында ҡабул итә беләләр, образлы фекерләйҙәр. «Кешелек үҙ тарихын ат тояҡтары менән дә яҙған», — тиелә бер урында. Бал айыртҡан мәлдә, мәҫәлән, «Олатайым миңә: «Улым, был йондоҙ һуты ул. Шул һут ямғыр менән ергә төшә, ҡорттар бал итеп йыя», — ти торғайны... Шул балды ашаған кешенең тормошо татлы була, наулығы ныҡ була, тип тә өҫтәр ине».

Был яҡтан ҡарағанда, А. Абдуллиндың тәүге әҫәрҙәренең береһе **«Онотма мине, ҡояш!»** повесы ифрат үҙенсәлекле. Әҫәр үҙәгендә рус шағиры Сергей Чекмарев образы. Ул — зоотехник, Мәскәүҙә уҡый, бер үк ваҡытта шиғырҙар ҙа яҙа, В. Маяковский, С. Есенин, М. Светлов, В. Луговскойҙар менән дә таныш. Уҡыуын тамамлағас, ул Башҡортостандың төпкөл районына эшкә килә. Ифрат ҡырыҫ, ауыр шарттарҙа эшләй, хәйер, малсылыҡ ҡасан да еңел һөнәр түгел. Шулай булһа ла,

мөмкинлек сығып торһа ла, яратҡан ҡатыны артынан Мәскәүгә кире ҡайтмай, Башҡортостанда ҡала һәм эш урынында һәләк була.

Повесть лирик, романтик буяуҙар менән һуғарылып яҙылған. Был, бер яҡтан, Сергей Чекмаревтың шағирлығы, донъяны шағирҙарса танып белеүе менән бәйле булһа, икенсенән, яҙыусының һүрәтләү стиле лә. Башҡа әҫәрҙәрендәге һымаҡ уҡ, геройҙары уның бай рухлы, донъяны шағирҙарса һәм фәлсәфәүи ҡабул итеүсәндәр. «Саҙрый, нисек уйлайһың, кешенең изгелектәрен һәм яуызлыҡтарын ҡояш хәтеренә ала микән? — тип хыяллана Сергей Чекмарев, иптәше менән далала үҙҙәре генә ҡалғас. — Беҙҙең йөҙөбөҙҙө, рухыбыҙҙы, һүҙҙәребеҙҙе ул онота микән әллә онотмай микән?»

Хәйер, Саҙрый үҙе лә шундай нескәлектәрҙе аңлауҙан мәхрүм түгел. «Мин шаҡ ҡаттым, — ти ул дуҫының әлеге һүҙҙәренән. — Үҙе тиҙәк эсендә йөрөй, ә күңеле гел күктә, ҡояшта».

Был тәбиғи, сөнки уларҙың донъяны танып белеүҙәре шулай. «Башҡорт халыҡ йырҙарының ни өсөн оҙон, моңло булыуына мин әле генә төшөнөм, буғай, — тине ул, уйланып. — Улар далала яралғандар. Ә далала хатта ҡояшлы көндәрҙә лә әйтеп аңлата алмаҫлыҡ яҡты һағыш, һине йөрәкһеткән моң ята». Бына шуға ла уларға «үҙәндән тын ғына һарлығып сыҡҡан йыр», йырлаусыһы күренмәгәс, «кеше түгел, дала үҙе йырлай, үҙе моңлана һымаҡ» тойола.

Шул уҡ ваҡытта, А. Абдуллин геройҙары шау лирикаға, романтик кисерештәргә генә бирелеп йөрөүсе хыялыйҙар түгел. Кәрәк саҡта Сергей Чекмарев, мәҫәлән, ғәжәп ҡаты ҡуллы, ихтыярлы, енәйәтсел ғәмһеҙлеккә, ҡоротҡослоҡҡа аяуһыҙ ҡаршы сыға.

«Донъялыҡта беҙ бер генә мәртәбә йәшәргә киләбеҙ, шуға күрә ғүмерҙе мөмкин ҡәҙәр бәхетлерәк итеп уҙғарырға ынтылырға кәрәк. Киләсәктә һинән барыбер әрекмән үҫеп сығасаҡ» тиеүселәр менән бәхәскә инә А. Абдуллиндың ыңғай геройҙары, шундай тенденцияларға ҡаршы көрәшә. Көрәш маҡсатында, маҡсатҡа ирешеүҙә күрә улар бәхет тигән төшөнсәне лә. «Ысынлап та, кеше ҡасан бәхетле? Уның теләге бойомға ашҡан саҡта. Теләк ни тиклем көслөрәк булһа, кисерештәр ҙә шул тиклем тәрәнерәк. Маҡсатҡа әле ирешмәгән һүрәттә лә, уға ирешергә тырышыу, шуның менән хыялланыу, шул хыял эсендә яныу мөһим».

А. Абдуллиндың драмалары, повестары һәм күп һанлы очерктары өсөн дә уртаҡ идея-йөкмәткe был.

Яҙыусының публицистикаһы ла юғары художестволы, төрлө һөнәр әйәләренә бағышлана: «Йылҡысы», «Умартасы», бейеү генийы («Йәндең йәнгә тартылыуы»)... Ләкин геройҙар һөнәрҙәре менән кем генә булмаһын, иң башта улар — кеше, донъяла үҙ урындарын тапҡан рухтары көслө, арҙаҡлы шәхестәр. Яҙыусы герой характерының ниндәй һыҙаттарына иғтибар итеүе очерктарының исемендә үк һыҙатлана: «Кеше — торғаны ялҡын», «Кеше рухы йән кереше кеүек», «Ғәмле, сәмле булһа ла йөрәк», «Кеше хаҡына», «Хәҡиҡәт өҫтөнлөгө»...

Әҙип заманының кисектергеһеҙ ҡыҙыу хәл-ваҡиғаларын һиҙгер тотоп ала, художестволы саралар аша ил иғтибарына күтәрә, хәл итеүҙе талап итә, ялҡынлы эшмәкәр, илһөйәр, ҡыйыу граждан булып сығыш яһай.

1. А. Абдуллиндың ижады менән уның тормош юлы араһында ниндәй бәйләнеш-ауаздашлыҡтарҙы күрһәтеп була?

2. «Ун өсөнсө председатель» драмаһы ауыл тарихының ҡайһы осорон сағылдыра? Ундағы конфликт асылы нимәлә?